*Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ*

# Әхиәр Хәким һабаҡтары


*Әхиәр Хәкимов*

Әҙип Әхиәр Хәкимдең вафатына ҡырҡы еткән көндәрҙә, 2004 йылдың февраль башында “Башҡортостан” гәзитендә “Йәнең үтһен сират күперен...” рухи һүҙемдә шулай тигәйнем: “Ислам тәғлимәте әйткәнсә, ул ниндәй зат ине, тип һорарҙар, ти, беҙ изгелекле зат ине, тип яуап бирербеҙ. Үҙ уйыбыҙҙан, телебеҙҙән уның кешелек сифаттарын, ғәмәли эштәрен, изгелектәрен, матур фекерҙәрен, әҙип булараҡ әҙәбиәтебеҙгә яҙып ҡалдырған тиҫтәләгән китаптарын иҫкә алырбыҙ, барлап, баһалап сығырбыҙ”.

Әхиәр Хәким минең үҙем өсөн иң яҡын ҡәләмдәшем, дуҫым, фекерҙәшем булыу менән бергә рухи туғандашым да ине. Хәләл ефеттәребеҙ яғынан туғанлыҡ — бажалыҡ ептәре лә бар. Ә былай аралашҡанда, ултырҙаш саҡтарҙа, халыҡ әйтмешләй, кәзәнең маллығы, бажаның туғанлығы инде, тип көлөшкөләй торғайныҡ. Ихлас рухи туғандаштар инек беҙ. Бер-беребеҙҙе ихлас хөрмәт иттек, үҙ-үҙебеҙҙе, хеҙмәттәребеҙҙе бүтәндәргә ҡарағанда тәрәнерәк аңланыҡ.

Өҫтәүенә, Мәскәү даирәләрендә, баш ҡаланың фәнни-ижади форумдарында, “Литературная газета” редакцияһы ултырыштарында, элекке СССР-ҙың союздаш республикалары баш ҡалаларында үткән фәнни-ижади конференцияларҙа Әхиәр Хәкимдең докладтарын, сығыштарын тыңлап, уның киң эрудициялы әҙәбиәтсе ғалим, туғандаш халыҡтар әҙәбиәтен яҡшы белгән әҙип, атаҡлы яҙыусылары менән ныҡ танышдуҫ икәнлегенә шаһит кешемен. Уның Сергей Михалков, Юрий Бондарев, Сыңғыҙ Айытматов, Олжас Сөләймәнов, Әдел Яҡупов, Иван Драч, Олесь Гончар, Рөстәм Ибраһимбеков, Василь Быков, Алесь Адамович, Георгий Гулиа, Георгий Ломидзе, Яан Кросс кеүек атаҡлы яҙыусылар менән ижади һәм рухи дуҫлығы үҙҙәре генә лә ни тора!

Хөрмәт иткән яҙыусыбыҙ Әхиәр Хәкимдең шунса ҙур эрудицияһын һәм юғары мәҙәниәтлеген мин иң беренсе нәүбәттә уның Мәскәү дәүләт университетында уҡып, СССР Фәндәр академияһы Донъя әҙәбиәте институты аспирантураһын үтеп, “Литературная газета”ла оҙаҡ йылдар

бүлек мөдире, редколлегия ағзаһы булып эшләп, олуғ баш ҡалабыҙ мәктәбен үҙләштергән шәхес булыуында күрәм. Киң мәғәнәһендә, Мәскәү мәктәбе — ул юғары кимәл.

Ҡәләмдәшебеҙ Әхиәр Хәким үҙе оло яу һәм тормош мәктәбе үткән, ҙур тәжрибәле һәм киң профилдәге ижадсы ине. Уның әҙәби-ғилми тәржемәсе, әҙәби тәнҡитсе, яҙыусы, әҙәбиәтсе тип атар үҙ баҫҡыстары бар. Уға повесть, романдарын урыҫсаға үҙе тәржемә итеп баҫтырыу ҙа бер ни тормай ине. Һәр ижади эшкә маһир булды ул.

Донъя әҙәбиәте институтында ғилми хеҙмәткәр булараҡ, фольклор һәм әҙәбиәт өлкәһендәге эшмәкәрлеге, ”Урал батыр” эпосын рус теленә тәржемә итеп, донъя кимәленә сығарыуы — әле бөтөнләй баһаланмаған тармаҡ. Йәнә, фән, тәржемә, шиғриәт буйынса эштәре лә үҙ өйрәнеүселәрен көтә.

Яҙыусыбыҙҙың Башҡортостанда тыуып үҫеп, белем алған, уҡытҡан, Үзбәкстанға китеп, мәктәптә эшләгән, үтә йәшләй яу юлдарын үткән, Мәскәүҙә ҙур ғүмере уҙған тынғыһыҙ тормош, белем, ғилем, ижад һабаҡтары бар. Улар, тәбиғи, яҙыусының ижадына ла үҙ эҙен һала һәм мәғлүм бер сағылышын таба, үҙе бер тәрән мәғәнәле һәм идея-эстетик, тәрбиәүи тәьҫирле һабаҡтарға әүерелә.

Ошо йүнәлештә Әхиәр Хәкимдең ижадын байҡап ҡарайыҡ.

Үҙ тиҫтер ҡәләмдәштәре менән сағыштырғанда, Әхиәр Хәкимов әҙәбиәткә һуңлабыраҡ килде. Йәшләй үткән ауыр яу юлдары, фронттан ҡайтҡас, тормош ҡыҫынҡылығы, Үзбәкстанға бәхет эҙләп китеп йөрөүҙәр, әйләнеп ҡайтҡас, тағы шул уҡытыу, мәктәп директоры эше әҙәби ижадҡа әллә ни форсат бирмәгәндер. Аҙаҡ ул юғары белемде лә 1956—1961 йылдарҙа, Мәскәү университетында һуңлабыраҡ ала, уныһы аспирантурала уҡыу менән ялғанып китә. Республикала яҙыусылар, журналистар даирәһенә шулай оҙаҡ аҡыл, белем туплағас ҡына әҙәбиәткә килеп инә. Килеп инә лә, әллә үҙе бик хушһынмай, әллә ҡәләмдәштәре тиҙ арала таныып, хуплап бөтмәй — тәртәне кире Мәскәүгә бора. Бәлки, был файҙаға ғына булғандыр. Әхиәр Хәкимдең хаким зат икәнен Мәскәүҙең юғары кимәле генә аса һәм билдәләй алғандыр. Был үҙе бер оло һабаҡ һәм беҙҙең әҙәбиәтебеҙҙең бәхете лә, бер уйлаһаң.

Ысындан да, Мәскәү бит Әхиәр Хәким өсөн төп йәшәү урынына, оло ижад, оло һабаҡ мәктәбенә әйләнде. Ул үҙе лә ҡырҡ йылға яҡын төп Мәскәү ғүмерен, олуғ баш ҡала һабағын “Мәскәү йылдарым — минең ғүмеремдең иң яҡшы йылдары” тип баһаланы. “Литературная газета”ла СССР халыҡтары әҙәбиәте буйынса редактор, бүлек мөдире вазифаһы, редколлегия ағзаһы булыу минең алдымда йүнле таныш түгел республикалар тормошон, уларҙың тарихын һәм хәҙергеһен белер, илебеҙҙең күп милләтле әҙәбиәттәре мәсьәләләренә үтеп инер, байтаҡ телдәрҙең нескәлектәрен аңлар өсөн ҡапҡалар асты. Республикаларға, сит илдәргә сығып йөрөү, төрлө халыҡтарҙың яҙыусылары менән аралашыу — былар һәммәһе лә миңә баһалап бөткөһөҙ тормош һәм ижад һабаҡтары булды”, — тип яҙҙы ул “Байрамың менән, Мәскәү!” тигән мәҡәләһендә.

Шулай ҙа, минең ҡарашымса, әҙәбиәт донъяһына Әхиәр Хәкимов шаулап түгел, тыныс һәм тыйнаҡ ҡына килеп инде кеүек. Башта ул үҙен-үҙе һынап ҡарау осорон да үтте, буғай.

Мин уның ижадын өс осорға бүлеп ҡарар инем: беренсеһе — тәржемә эше, икенсеһе — әҙәби тәнҡитсе, өсөнсөһө — әҙәби ижад. Шуның ҡатарына әле утыҙ йылдан ашыуғаса һуҙылған оҙон журналистика хеҙмәте осорон да ҡушарларға мөмкин. Яҙыусыға әҙәби ижад менән берлектә үтә мәшәҡәтле гәзит-журнал эшен алып барыуҙары һис еңелдән булмаған-дыр. Бының өсөн шунса фиҙакәрлек һәм үҙ ижад эшеңә бирелгәнлек, күпме көс-ҡеүәт кәрәк. Был үҙе рухи ҡаһарманлыҡ, ижад һабағы өлгөһө. “Ағиҙел” журналы редакцияһынан аҙаҡ егерме биш йыл буйы өҙлөкһөҙ “Литературная газета” редакцияһында бүлек мөдире, редколлегия ағзаһы булып иң ауыр һәм үтә яуаплы вазифаларҙы башҡарыу оло ҡаһарманлыҡҡа тиң түгелме ни?! Журналист Әхиәр Хәкимдең “Литературная газета”ла сирек быуат эшләү дәүере үҙе махсус өйрәнеүгә һәм оло баһаға лайыҡ. Был гәзит уның тураһында: “Союздаш һәм автономиялы республикаларҙа Әхиәр Хәкимовты белмәгән һәм үҙенең әҙәби яҙмышында дуҫтарса ҡатнашлығын тоймаған яҙыусы юҡтыр”, — тип яҙҙы.

Тәржемә эше — Әхиәр Хәкимдең иң тәүге һәм сағыштырмаса ҡыҫҡа ижад осоро. Ул күренекле әҫәрҙәрҙән, рус классик әҙәбиәтенән И.А.Гончаровтың “Ғәҙәти хәл” (“Обыкновенная история”) романын һәм И.С.Тургеневтың хикәйәләрен башҡортсаға тәржемә итеп баҫтырҙы. Былар, минең фекеремсә, буласаҡ башҡорт яҙыусыһы өсөн классиктар әҫәре өлгөһөндә образдар тыуҙырыу, тел-стиль оҫталығына өйрәнеү мәктәбе, ижад һабаҡтары булды. Шулай әкренләп үҙ ҡәләмен сарланы ул.

Әле студент сағында Мәскәү дәүләт университетында диплом эше итеп Һәҙиә Дәүләтшинаның “Ырғыҙ” романындағы образдар һәм тел-стиль үҙенсәлектәре мәсьәләләрен алыуын да әҙәби оҫталыҡҡа өйрәнеүҙең бер күренеше тип иҫәпләргә мөмкин. Үрнәктәрҙән өлгө алына. Әхиәр Хәким үҙен яҙыусы итеп танытҡас, әҙәби тәржемә һөнәренең икенсе яғын асты — үҙ әҫәрҙәрен башҡорт теленән урыҫ теленә ауҙарып, художестволы тәржемәнең бына тигән үрнәктәрен бирә алды. Тәржемәләгән роман һәм повестары шуның матур миҫалдары. Былар ике яҡлы тәжрибә һабағы ине, асылда!

Алтмышынсы йылдарҙа “Ағиҙел” журналында бүлек мөдире булып эшләгәндә, әҙәбиәт ҡаҙанында ҡайнай башлағанда Әхиәр Хәкимовтың ижади эшенең икенсе осоро — әҙәби тәнҡитсе миҙгеле асылып китте. Гәзит-журнал биттәрендә яңы сыҡҡан китаптар, романдар, повестар тураһында тәнҡит мәҡәләләре, рецензиялары күренде. Яҙыусыларҙың йыйылыштарында ла уңыштар, кәмселектәр хаҡында үҙ фекерҙәре менән бүлеште. Шуларҙың ташҡа баҫылған өлгөләре автор тарафынан һайлап алынып, 1967 йылда Өфөлә “Әҙәбиәт һәм заман” исеме менән айырым йыйынтыҡ булып нәшер ителде. Китап исеме аҫтына йәйәләр эсенә “Уйланыуҙар, анализдар” тип ҡуйылғайны. Ысындан да, мәҡәләләрҙең күпселеге алтмышынсы йылдарҙа донъя күргән романдарға, повестарға, поэмаларға анализға, заманса уйланыуҙарға ҡоролғайны. Улар араһында бигерәк тә Һәҙиә Дәүләтшинаның “Ырғыҙ”, Әкрәм Вәлиҙең “Гөлйемеш сәскәһе”, Әнүәр Бикчәнтәевтың “Ожмах вәғәҙә итмәйем”, Хәким Ғиләжевтың “Погонһыҙ һалдаттар” романдарына яһаған күҙәтеүҙәре, төплө уй-ҡараштары конкретлығы менән айырылып тора ине. Шул яғы ла иғтибарҙы биләне, яңы тәнҡитсе башҡорт романдарының жанр тәбиғәтенә, проблемаларына, художестволы үҙенсәлектәренә бөтә

Союз күп миллəтле əҙəбиəте, хатта бөтөн донъя романистикаһы юғарылығынан тороп ҡараш ташларға, киң уй-фекерҙəр йөрөтөргə ынтыла. Китаптың икенсе бүлегендə башҡорт поэзияһы, айырыуса поэма жанры буйынса нигеҙле анализдар яһала, хаҡлы тəнҡит, кəңəш һүҙҙəре əйтелə. Шул уҡ ваҡытта “Ағиҙел” журналының 1968 йылғы 12-се һанында ошо китап хаҡында “Үҙенсəлекле ижад” исемле рецензиямда былайыраҡ йомғаҡ яһағанмын: “Тимəк, автор тəүге китабы менəн үк əҙəби тəнҡитебеҙ үҫешендə өлөш булып ҡалырлыҡ, уның юғары идея-эстетик кимəлен билдəлəрлек эш күрһəтə тигəн һүҙ. Əҙəбиəткə талантлы һəм эрудициялы тəнҡитсе килə”, тип оло һүҙ əйткəнмен. Əммə беҙ, əҙəби йəмəғəтселек, ныҡлап ҡыуанырға һəм йыуанырға əллə ни өлгөрөр-өлгөрмəҫ тə ҡалдыҡ, талапсан һəм һəлəтле тəнҡитсебеҙ ҡабат Мəскəүгə китеп барҙы. Унда ул баштағы эш урыны итеп, үҙе аспирантура үткəн Донъя əҙəбиəте институтын һайланы. Фольклор, əҙəбиəт ғилеме менəн шөғөллəнə башланы. Кандидатлыҡ диссертацияһы нигеҙендə яҙған Мостай Кəрим ижады тураһындағы китабын Ташкентта “С веком наравне” исемендə урыҫ телендə сығарҙы. Шул дəүерҙəрҙə Үзбəкстан Коммунистар партияһының Үҙəк комитеты секретары булып эшлəгəн Шəрəф Рəшидов тураһында китап яҙып, шунда уҡ нəшер иттерҙе. Йəғни, мəшəҡəтле һəм мəртəбəһеҙ əҙəби тəнҡит һөнəрен ташлап, тынысыраҡ һəм абруйлыраҡ фольклористика һəм əҙəбиəт ғилеменə тотондо. Əхиəр Хəким был өлкəлəрҙə лə үҙенең яңы ғилми-ижади һəлəте мөмкинлектəрен асты. “Урал батыр” эпосының урыҫсаға академик тəржемəһен эшлəне; фин-уғыр халыҡтарының ҡаһарманлыҡ эпостары, баш ҡала əҙəбиəт ғилеме донъяһы эсенə сумды. Əҙəби тəнҡитсенəн əҙəбиəтсе, фольклорсы булып китеп, Əхиəр Хəким филология буйынса үҙенең ғилми тикшеренеү офоҡтарын киңəйтте, юғарыраҡ үлсəмдəр менəн эш итте. (Был мөһим мəсьəлəлəргə алда кире əйлəнеп ҡайтырбыҙ əле).

“Литературная газета” редакцияһына эшкə күскəс иһə, филологыбыҙҙың журналист һəм яҙыусы булараҡ ҡомары гөлтлəп ҡабынды. Ул яңы даирəлə, берҙəн, ысынлап та, яҙыу-һыҙыу, редакторлау эше ҡағыҙ диңгеҙенə күмелде, икенсенəн, Мəскəү журналистары, яҙыусылары араһында көн-төн тигəндəй ҡайнаша башланы. Былар уны үҙенəн-үҙе əҙəби ижад эшенə лə ныҡлап ылыҡтырҙы.

Шулай, үткəн быуаттың етмешенсе йылдары башынан Əхиəр Хəкимде ижади эшмəкəрлегенең өсөнсө этабы булырлыҡ осорона атлаған прозаик яҙыусы итеп белəбеҙ. Шуныһы ғəжəп, “Литературная газета” һынлы Бөтə Союз үҙəк əҙəби матбуғат баҫмаһында бик ҡатмарлы һəм яуаплы вазифаларҙы башҡарыуға, көнө-төнө тигəндəй журналистика эше менəн ултырыуға ҡарамаҫтан, əҙəби эшкə, повестар, торараҡ романдар яҙырға тотоноуы һəм йыл да бер-бер артлы баҫтырып сығара барыуы үҙе бер ижади ҡаһарманлыҡ булмай ни булһын! Күрəһең, нəҡ шундай ижади атмосферала күпме йылдар йыйылып килгəн тормош, яу юлдары, яҙыу-һыҙыу шөғөлө ташҡыны тулышып, ҡапыл йырылып китте, ахырыһы.

Яҙыусы үҙе əйтеүенсə, айырыуса яу йылдары ваҡиғалары, Украина, Белоруссия, Польша, Венгрия, Австрия, Чехословакия ерҙəре аша уҙған ҡанлы, фажиғəле һуғыш юлдары тынғылыҡ бирмəгəн уға. “Утлы йылдар иҫтəлеге”ндə яҙғанынса, “байтаҡ əҫəрҙəремə үҙлегенəн тиерлек

һуғышта күргән-кисергәндәрем килеп инә… Һуғыш күренештәре бик йыш төштәремә керә. Мин һаман да, гүйә, арҡама рация аҫып, ялҡын биләгән алыҫ офоҡҡа ҡарап атлайым да атлайым”, ти. Шулай, етмешенсе йылдар башында “Осар ҡоштар”, “Күпер”, “Бәйге”, “Йәйғор” повестары майҙанға килә. Улар һалдат авторҙың оҙон яу юлдарында күргәндәрен, кисергәндәрен документаль дөрөҫлөгөндә һүрәтләүе менән үҙенсәлекле. Шуға улар баталь картиналарҙың, хәтәр ситуацияларҙың тәрән уй-кисерештәр аша тасуирланыуы менән отошло.

Бер саҡ Әхиәр менән фронт прозаһы хаҡында һөйләшкәндә, “мин үҙ повестарымда, һуғыштың үҙенә ҡарағанда, шул һуғыш эсендәге һалдаттың психологик хәлен, башынан йәшендәй ялтлап үткән киҫкен уй-тойғоларын нығыраҡ һүрәтләргә тырыштым. Ул килеп сыҡтымы, юҡмы — тәнҡитселәр, уҡыусылар үҙҙәре генә әйтә ала” тигәндәйерәк фекер әйткәйне. Был концепцияһын күпләгән интервьюларының берәһендәме, мәҡәләләрендәме яҙып та сыҡҡайны.

Әлеге Бөйөк Ватан һуғышы хаҡындағы повестарында ошо ижади маҡсатының күпмелер ғәмәлгә ашырылыуын тоям. Үҙ йөрәге аша үткән иң ҡырҡыу, хәтәр яу ситуациялары тап ошо аспекттараҡ сағылдырырға тырышыла. Яуҙағы һалдаттар, ғәҙәттә, иң сая һынылыш шарттарына ҡуйыла. Мәҫәлән, “Күпер” повесында ул бер взвод һалдаттарының бик ныҡ нығытылған дошман күперен алыу өсөн әҙерлек һәм алыш моментын тасуирлау аша бөтөн бер баталь картина тыуҙыра, характерҙарҙы аса, драматик, психологик киҫкен хәлдәрҙе һайлай. Күпер үҙе үк әҫәрҙә символик мәғәнәгә эйә: ул ике ярҙы тоташтырыусы, юлдарҙы ялғаусы, өмөттәрҙе ҡушыусы, тар ерҙе берләштереүсе, характерҙарҙы, яу таһылын кәүҙәләндереүсе таш һын һымаҡ.

Ә бына “Бәйге” повесында иһә һуғыш хәлдәре, тыл шарттары кеше ғүмере юлын һынар, бәйгеләге ярыш-алыш кеүегерәк призма аша бирелә. Бында ла бәйге киң мәғәнә ала. Автор әйткәнсә, “төптәнерәк уйлаһаң, йәшәгән ғүмерең — үҙе үк бәйге. Яҙмышың, күңелеңә ҡанат ҡуйған хистәрең, уйлаған уйҙарың, етәһе моратың — бөтәһе бәйге. Йәшәгән заман — бәйгеләр бәйгеһе”.

Хәл-ситуациялар үҙенсәлеге, әҫәрҙең йүнәлеше һәм структураһы менән Әхиәр Хәким повестары күп йәһәттән Василь Быковтың хәрби повестарына тартым: окоп тормошо, киҫкен ситуация, рядовой һалдат характерҙары, мораль-этик проблематика, ябай структура, локаль яу һәм башҡалар. Айырыуса “Бәйге”, “Йәйғор” повестарында төпкө ағым, геройҙарҙың тормошон, уй-тойғоларын тасуирлауҙа психологизм һыҙаты асыҡлана бара, йәйғор төҫтәре сағыулана.

Фронт, тыл, тыныс төҙөлөш, йәштәр, мөхәббәт темаларына бишалты повесть яҙып баҫтырғас, Әхиәр Хәким әллә яңы, эрерәк жанрҙарға күсеү, әллә бәхәсләшеп алыу ниәтенән “Куштирәк” исемле ҡыҫҡа роман яҙып ҡараны. Юҡ, яҙып ҡына ҡараманы, әҙәбиәттәрҙә, шул иҫәптән, башҡорт прозаһында ла һыу буйлы оҙон, кирбестәй ҡалын-ҡалын романдар пәйҙә булыуына полемика рәүешендә йыйнаҡ, тос роман тәҡдим итте. “Куштирәк”тә башҡорт романдарына хас традицион сюжеттар, өсмөйөш схемаһы ла, мөхәббәт мажаралары ла, ваҡ-төйәк ситуациялар, һалыулап ситкә сығып китеүҙәр, буш ялтыр нәмәләр менән әүрәү-тултырыуҙар — һәммәһе-һәммәһе лә ҡәләм осона эләктерелә.

һәлкәү тәнҡитселәргә, яндырай шағирҙарға, шыма драматургтарға ла тел тейә.

Ғөмүмән, "Ҡуштирәк" — бар булмышы менән ироник әҫәр. Уның маҡсаты — төп объекты ҡуштирәклеләрҙән еңелсә көлөүҙән бигерәк, шул ауылдаштарына һылтанған булып, әҙәбиәтебеҙҙәге йомшаҡлыҡтарҙан көлөп, әҙәби пародиялау ул. Был ҡыҫҡа роман, асылда — прозаик ҡәләмдәштәренә йыйнаҡлыҡҡа, һәлмәклеккә саҡырыу ораны ла. "Ҡуштирәк" романын яҙғанда мин Балтик буйы авторҙарының ҡыҫҡа роман жанры тәжрибәһенә таянып эш иттем", ти үҙе. Тимәк, күп милләтле совет әҙәбиәте ҡаҙаныштары тәжрибәһенән үрнәк ала, шуға ориентир тоторға саҡыра.

Романдағы ироник полемика ла һабаҡтың бер төрө. Төртмәле һабаҡ уҡығас, үҙеңә лә романистикала яңылыҡтың үрнәген биреп ҡорорға кәрәктер бит. Быныһы инде бик яуаплы, күпкә ауырыраҡ бурыс. Йә уңаһың, йә туңаһың. Баҙнатлана Әхиәр Хәким бындай аҙымға ла. Һикһәненсе йылдарҙың тәүге яртыһында ул "Һауыр ҡумта" менән "Думбыра сыңы", бер аҙ һуңыраҡ "Каруан" тарихи романдарын яҙҙы. Әйтәһе түгел, романса фекерләү әҫәрҙең проблематикаһын яңы, юғары яҫылыҡта һүрәтләүҙе талап итте. Атаҡлы урыҫ романисы Даниил Гранин әйтеүенсә: "Романса фекерләү — ул тормош философияһы, кешесә йәшәүҙең, йәғни тарихи, социаль күренештәр, шәхес натураһы, уның йәмғиәттәге урыны, хәрәкәте тураһында уйланыуҙар философияһы".

"Тарихи роман — үткәндең эҙмә-эҙлекле йылъяҙмаһы түгел, уның художестволы сағылышы, — ти Әхиәр Хәким. — Бында автор концепцияһы хәл иткес роль уйнай: прозала тормош фәлсәфәһен төплөрәк аса белергә кәрәк".

Тап ошо принциптарҙы тотоп эш итә лә инде ул үҙенең әлеге тарихи романдарында. Уларҙың тәүге икеһе Алтын Урҙа дәүләте заманындағы башҡорт тарихы, Туҡтамыш хан, Аҡһаҡ Тимер, Иҙеүкәй әмир, Һабрау йырау кеүек тарихи шәхестәр эшмәкәрлегенә бәйле хәл-ваҡиғаларға нигеҙләнгән. Шуларҙың тарихи, социаль-ижтимағи асылы, тарихи философияһы шаҡтай тәрән художестволы сағылыш тапҡан. Урта быуаттар тарихының һулышын, заман заңын, ыҙан-йолаларын тойҙорор колоритлы һүрәтләнеште, һүҙ-стиль һөрөлөшөн асыр лексик ҡатламдарҙы, стилистик төҫмөрҙәрҙе асыҡ күрәһең. Йәғни, авторҙың аныҡ тарихи концепцияһы, тарихилыҡ менән сәнғәтселек принциптарының йәтеш берләшеүе авторҙы эпик ҡоласлы оҫта романист итеп таныта.

"Каруан" романында иһә авторҙың идея-эстетик концепцияһы артабан киңәйә һәм тәрәнәйә бара. Бында тарихилыҡ, документаллек, шәреҡ поэтикаһы тибы үҙәкләшә. Романда ике заман ҡатламы — XIV быуат аҙағы һәм XX быуаттың тәүге сиреге сюжеттары берләшә. Каруан мотивы илдәр, халыҡтар, цивилизациялар, мәҙәниәттәр аралашыр, үҙ-ара йоғонто яһашыр символик мәғәнә ала.

Был романы өҫтөндә оҙаҡ эшләүе һәм тарихи мәғлүмәттәр менән ентекле танышыуы хаҡында автор былай ти: "Каруан"ды яҙыр өсөн бигерәк тә ныҡ әҙерләнергә, ике-өс тиҫтә китапты күҙҙән кисерергә тура килде. Шул иҫәптән, сығатай, фарсы телдәрендәге боронғо тарихи яҙмаларҙы уҡыным, ғәрәпсәнән урыҫсаға, үзбәксәгә тәржемә ителгән элекке хроникаларҙы өйрәндем. Ошо тиклем материал туплағас, кәмендә 20—25 табаҡлы роман

яҙылыр тигәйнем, асылда иһә уны 15 табаҡ менән цикләнем". "Хажитархан ҡалаһының фажиғәһе, Сәмәрҡәнд, Һират ҡалаларына, Тимерҙең кинйә улы Шаһруһ мырҙа менән уның ҡатыны Гәүһәршад Бигемгә бәйле ваҡиғалар тарихи сығанаҡтарға таянып бәйән ителде", тип ҡайһы берҙәрен атап та әйтә. Йәнә, Әхиәр Хәким күпме бай материал тупламаһын, күпме эпик киңлеккә йәйелмәһен, йыйнаҡ, тығыҙ мәғәнәле, тос роман принцибын тота. Күләм түгел, сифат мәсьәләһе мөһим.

Урта быуат әҙибебеҙ Сәиф Сараи образына мөрәжәғәт иткән "Дала моңо" романында географик киңлектәрҙе быуаттар аша Иҙел—Урал буйҙарынан Яҡын Көнсығыш, Мысыр (Египет) илдәренә, классик шәреҡ мәҙәниәте һәм әҙәбиәте даирәләренәсә йәйеп, йәнә шәреҡҡә бағлы идея-эстетик принциптарын баҙыҡландырҙы, яңы ҡапҡалар асты автор.

Әхиәр Хәким ижадының өсөнсө төп осорон идея-эстетик, жанрҙар эволюцияһы йәһәтенән өс бүлеккә бүлеп ҡарарға ла мөмкиндер. Ул хикәйәләрҙән повестарға, повестарҙан романдарға, романдарҙан йәнә повестарға күсеү юҫығында күҙәтелә. Был үҫеш-үҙгәреш жанрҙар алмашыныу менән генә түгел, идея-эстетик принциптарҙың тәрәнәйеүе, поэтикаһының яңырышы, камиллаша барыуы менән билдәләнешле. Шул ижади үҫешенең өсөнсө бейеклеген "Ҡош юлы", "Өйөрмә", "Дауылдан ҡотолоу юҡ" романдары төплө раҫлай.

"Ҡош юлы" беҙҙә яҙмыш романының типик бер үрнәгелер, моғайын. Был төп геройҙар Мансур Ҡотошовтың, ҡатыны Нураниәнең үтә бормалы һәм ауыр тормош юлдары аша һүрәтләнә. Романда кеше яҙмыштары төрлө заман шарттарына, үҙ-ара мөнәсәбәт-мөғәмәләләргә бәйле рәүештә мораль-этик планда ла күп яҡлап художестволы дөйөмләштерелә. Автор үҙе әйтмешләй, тормош ҡиссаһы, яҙмыштар төйөнө кеше ғүмеренең ҡайғы-шатлыҡтарынан, ҡылыҡ-ҡылмыштарынан, күрәһе һәм кисерәһе төрлө хәлдәрҙән туҡыла. Әммә ғүмер, боронғо бер философ әйткәнсә, һис тә хаталар теҙмәһе, үкенеүҙәр харабаһы түгел, бәлки, заман ағышының, тормош барышының кешеләр яҙмышында үҙенсәлекле һынылышы, йәшәүҙең көрәш һәм алыштар, хеҙмәт һәм еңеүҙәр, табыштар һәм юғалтыуҙар аша алға хәрәкәте ул.

"Кешенән ни ҡала был донъяла? Ысынлап та, үҙ ғүмерендә әҙме шатлыҡ, ҡайғы-хәсрәт кисерә, ваҡыты менән хаталана, нимәгәлер ынтыла. Мәғәнәһе ниҙә быының?" — геройы исеменән шундай һорау ҙа ҡуя автор. "Әйе, — ти үҙенә, — кешенең ҡылған хеҙмәте, яҡшылығы ҡала. Шуның менән бергә етелмәгән мораты ҡала. Атанан балаға, бер быуындан икенсеһенә күсә ул шарттар, изге маҡсаттар. Тормоштоң заңы — тәртибе шул". Геройҙар үҙ ғүмерҙәре, эштәре, тәжрибәләре менән раҫлаған оло яуап был.

Күк йөҙөндә миллион-миллиард йондоҙҙары менән ҡош юлы мәңгегә баҙлап торған шикелле, кешелек тә заманды замандарға, быуынды быуынға ялғап, яҡты эҙ һалып, һуҙылыр ҙа һуҙылыр — "Ҡош юлы" романының исеме һәм есеме аңлатҡан символик мәғәнәнең айышы ла шунда.

Был романда үткәндәргә ҡайтып һүрәтләү — ретроспектив алым үҙәктә ята. Структураһы ҡоршаулы композицияға ҡоролған.

"Өйөрмә" менән "Дауылдан ҡотолоу юҡ" романдары инде беҙҙең әҙәбиәттә әлегәсә сағыштырмаса аҙыраҡ яҡтыртылған егерменсе быуаттың утыҙынсы йылдарындағы рәхимһеҙ репрессия ваҡиғаларына ба-

ғышланыуы һәм шуны йыш ҡына психологик-этик планда трагик киҫкенлеге менән һүрәтләүе йәһәтенән айырыуса әһәмиәтле. Элекке башҡорт дворяндары ғаиләһенән булған Богдановтар династияһының яҙмышы аша уҡымышлы шәхестәребеҙҙең һәм дәүләт эшмәкәрҙәренең берсә данлы, берсә бормалы тормошо, аҙаҡта трагик осланыуы тетрәндергес сағылыш тапҡан.

Был романдарҙы үҙ ваҡытында бер уҡып, шундай кисерештәр, уй-фекерҙәр драматизмы үткәргәнемдән һуң, шундағы фажиғәле яҙмышлы ҡаһармандар мин белгән Богдановтарҙан Мәскәүҙә фәнни етәксем Мәҙинә Богданова, уның атаһы Искәндәр Богданов булыуын аҙаҡ ишетеп, икенсе тапҡыр рухи ғазаптар эсенә сумдым. Ҡәҙерле етәксем әллә үҙенең йөрәген ҡат-ҡат яраламаҫ өсөн, әллә беҙҙең нығынып етмәгән йәш йөрәгебеҙҙе йәлләп, әҙ генә булһа ла йөрәк яраларын һиҙҙерһәсе! Бына ниндәй сабырлыҡ һәм ныҡлыҡ һаҡлай алған уҡымышлы, саф рухлы батыр заттар. Үҙе лә Мәҙинә Искәндәр ҡыҙы Богданованың шәкерте булған Әхиәр Хәкимов, асылда, улар династияһына үҙ романы менән шундай һәйкәл ҡорған — беҙҙең әҙәбиәтебеҙҙә роман жанрын юғары баҫҡыс пьедесталға күтәргән. Был үҙе — яҙыусылыҡтың оло ҡеүәте, һиммәтле хеҙмәте. Был романдарҙағы Хәҙисә Богданова, Искәндәр Богданов, Камил Мораҙымов кеүек яңы һәм ҡатмарлы социаль типтарҙы кәүҙәләндереүе менән әҙәбиәтебеҙгә өр-яңы һыҙаттар өҫтәй, образдар галереяһын ишәйтә яҙыусы.

Йәнә, яҡташыбыҙ, оло шәхес Мәҙинә Искәндәр ҡыҙы Богданованы иҫкә алғас, шуны ла әйтеп китеү кәрәктер. 60-сы йылдарҙа СССР Фәндәр академияһының Донъя әҙәбиәте институты 200 томлыҡ ”БВЛ” (Библиотека Всемирной Литературы) серияһын әҙерләү эшенә тотонғас, нәҡ Мәҙинә Искәндәр ҡыҙы инициативаһы, тырышлығы менән тәүге томдарҙың береһенә беҙҙең ”Урал батыр” эпосының рус теленә тәржемәһе лә индерелә. Тәржемәне Әхиәр Хәкимов менән Мәҙинә апайҙың ҡыҙы — Адельма Сабировна Мирбадалова эшләй. Унан алдараҡ Әхиәр Хәкимов Богданова етәкселегендә эпостың академик тәржемәһен әҙерләп, ”Наука” нәшриәтендә баҫтыра. Адельма Сабировна иһә 1977 йылда шул уҡ нәшриәттә донъя күргән ”Башкирский народный эпос” китабын әҙерләүҙә ҡатнаша, уға ҙур баш һүҙ яҙа. Мәҙинә Искәндәр ҡыҙы ”Урал батыр” эпосын ”БВЛ” серияһына әҙерләгәндә, күренекле ғалимә, Донъя әҙәбиәте институты директоры урынбаҫары Арфо Аветисовна Петросянға мөрәжәғәт итеп, унан эпосҡа баш һүҙ яҙҙыртып ала. Нәҡ Арфо Аветисовна, күренекле мифология белгесе булараҡ, ”Урал батыр” эпосын ныҡлап өйрәнә һәм иң беренсе булып унда ”Авеста” эпосы сюжеттары менән ҙур уртаҡлыҡ булыуына күрһәтә.

Мәҙинә Искәндәр ҡыҙы татарҙарҙың ”Идегей” дастанын да ”БВЛ” серияһына индерергә тырышып ҡарай. Семен Липкинға уны тәржемәләүҙә ҙур ярҙам күрһәтә, эпос буйынса докторлыҡ диссертацияһы әҙерләй. Әммә КПСС Үҙәк Комитеты әһелдәре ҡамасаулау сәбәпле, дастандың тәржемәһен баҫтырыу тыйыла. Мәҙинә Искәндәр ҡыҙы, диссертацияһын яҡлап өлгөрмәйенсә, вафат булып ҡуя. Лагерҙа һаулығы ныҡ ҡаҡшай уның. Мәҙинә Искәндәр ҡыҙының иң ҙур эше, әлбиттә, ”Урал батыр” эпосының руссаға тәржемәһе, ҡомартҡыны донъя әҙәбиәте кимәленә сығарыуы менән бәйле.

Әхиәр Хәким исем-атын алған әҙәбиәтсебеҙҙең ижады алда әйткән осорҙарға һәм ҡыҫаларға ғына һис һыйып бөтмәй, әлбиттә. Унда төрлө тармаҡ — тәржемә, әҙәби тәнҡит, аҙағыраҡ фольклор, әҙәбиәт ғилеме, проза жанрҙары йыш ҡына үрелеп, аралашып та бара. Уға биҙәк булып, шиғырҙары бөрөләнеп сәскә ебәрә. Шиғри һәләте прозаһын поэтик биҙәктәр менән күркәмләй, йыш ҡына поэтик-эмоциональ рухын кәсәйтә.

Әхиәр Хәкимдең төрлө жанрлы, күп биҙәкле ижадының төп айышы, минеҫсә, төптәрәк ята. Матур әҙәбиәттең нәфислеген ул тел, стиль, образ саралары менән генә түгел, төрлө кинәйәләр, ым-ишаралар, тел төбө, юл араһы мәғәнәһе, әҫәрҙең эске моңо, символикаһы, философик фекерлек хәсиәттәре менән дә сорнап, иркен эш итә. Ғәжәпме ни, әгәр тел оҫтаһының һүҙ ураўҙары, үҙенсә юрамдары ла йыш осраһа. Тел йоҙаҡ икән, һүҙ айышын асырға, үҙ асҡыстарын табырға ла кәрәк. Һүҙем йәнә шуға бара, Әхиәр Хәким нәғеҙ тел хакимы һәм хикмәт эйәһе лә ул. Бөгөнгө тел менән әйткәндә, әҙип Әхиәр Хәким образдар менән фекерләүсе заман философы ла. Уның төптәрәк ятҡан фәлсәфәһен тоя һәм аңлай белергә аҫыл асҡыс хәжәт.

Бына һуңғы әҫәрҙәренең береһе — “Пандора ҡумтаһы” повесына ғына иғтибар итәйек әле. Йөкмәткеһенә ҡарағанда, хәҙерге көнкүреш яҙмаһы: ауыл тормошо, һайлау мажаралары, төрлө ығы-зығылар. Әммә “Пандора ҡумтаһы”нда, берҙән, “Ҡуштирәк” ҡыҫҡа романынан килгән автор юморы көслө, икенсенән, сюжет төҙөлөшө ҡатлы-ҡатлы, өсөнсөнән, аллегория, фантастика элементтары, төпкө ағым бик хосусиәтле. Шулай өслөк һан принцибы үҙәкләшә повеста: өс йүнәлеш, өс персонаж, өс ҡат һынамыш, өстән ары көс, өс тә өс — алты.

“Йылан йылының алтынсы айы, айҙың алтынсы көнө, иртәнге сәғәт алты ине” тигән алтылы һөйләм менән асыла повесть. Ул тиктән түгел: алты ла хикмәтле һан, имеш. Нәҡ ошо йылан йылының алтынсы айы, айҙың алтынсы көнө, иртәнге сәғәт алтыла бәндәләрҙең йоҡола, иблистең уяу сағында күктән ергә Пандора атлы ғәләмәт зат төшкән. Хәтәр мәл тыуған: өс “6” бергә теҙелеп, “666”, йәғни әҙәми затты күрә алмаусы йыртҡыс януар һаны хасил булған.

Мәғлүм булыуынса, боронғо грек мифологияһында Прометей исемле баһадир, илаһтар йәшәгән Олимп тауынан ут урлап, уны ҡараңғылыҡта, һыуыҡта ыҙа сигеп, ярым ҡырағай хәлендә йәшәгән кешеләргә килтерә, шулай кешеләрҙең күҙен аса, донъяларын яҡтырта, көнитмештәренә йылылыҡ индерә, күңелдәрен йылыта. Бының өсөн Прометей Зевс тарафынан ҡаты хөкөмгә тарттырыла, мәңгелеккә тауҙарҙа ҡая ташына бығаулап ҡуйыла, бер бөркөт уны көн дә ыҙалап, күкрәк-бауырҙарын суҡып тора. Ә ерҙә ут алған кешеләр аҙынып, иркенәйеп китмәһен өсөн, Зевс баш аллаһ балсыҡтан яһалмыш Пандора исемле ҡатын-ҡыҙ затын, өҫтөнә көмөш күлдәк, башына алтын таж кейҙереп, ҡулына мәкер-хыянат, төрлө сир-сырхау тултырылған ҡумта тоттороп, ергә төшөрә. Үҙе күренмәй, ситтән генә бағып, ҡумтаһынан әҙәмдәрҙе мәкерле, хыянатсы итер, төрлө сир-зәхмәттәргә һабыштырыр ағыу сәсеп йөрөй башлай.

Был мифик ҡарыһүҙ мотивын Әхиәр Хәким Пандора ҡумтаһынан төшкән мәкер, сихырсылыҡ, ваҡытлыса осоу орлоҡтарын Замир, Ғилметдин, Зифа исемле персонаждарына күсереп, хәҙерге заманда ла

кешеләр ҡылығына һеңгән өҙөш-тартыш, яу-янъял, мәкер-хыянат күренештәрен үҙенсә фаш итә, юмор, сатира алымдарын оҫта ҡуллана. Мораль-этик, философик, социаль проблемаларҙы яҡтыртыуҙа фантастик, гиперболик, гротеск, юмористик алымдар әҫәр поэтикаһының нигеҙен тәшкил итә. Шуға уның теле, стиле лә тапҡыр һүҙҙәр, кинәйәләр, ымишаралар, тел сарлауҙар менән тулы бер юҫыҡҡа көйләнә.

Йәки шулай уҡ хәҙерге быуатыбыҙҙа яҙылған “Йыһан ҡапҡаһы” повесында беҙҙең эраға тиклем йәшәгән ҡытай шағиры Ли Бо яҙмышы һәм шиғриәте миҫалында бөгөнгө замандарға ла шунса ауаздаш мораль-этик, философик проблемаларҙы бай палитралы поэтика аша яҡтырта. Конфуцийҙың этик, философик ҡараштарының хәҙер ҙә заман поэзияһы кеүек актуаль икәнен аңлата ул.

Яҙыусы ижадын, уның эволюцияһын ҡыҫҡаса ғына характерлап үткәндән һуң, Әхиәр Хәкимдең башҡорт әҙәбиәтенә индергән өлөшө, яңылығы, Әхиәр Хәким феномены низә, тигән һорау ҙа тыуыуы мөмкин. Мин уны былай тип әйтер инем.

Әхиәр Хәким хәҙерге прозабыҙға, айырыуса роман һәм повесть жанрҙарына заман проблемаларын ҡыйыу индереүҙә, уның интеллектуаль кимәлен күтәреүҙә, поэтикаһына яңылыҡтар өҫтәүҙә, милли романистикабыҙҙың ҡаҙаныштарын элекке СССР дәүләте киңлектәренә сығарыуҙа ҙур өлөш өҫтәне, ә үҙен оригиналь һәләтле, киң эрудициялы әҙип итеп танытты. Уның иң юғары баһаға лайыҡ эше, әлбиттә, ”Урал батыр” эпосын тәржемәләп, донъя әҙәбиәте киңлегенә сығарыу менән бәйле.

Әхиәр Хәким шәхес һәм яҙыусы булараҡ — феноменаль күренеш. Башҡортостан Республикаһының халыҡ яҙыусыһы тигән исеме быға бер дәлил. Ул үҙ ижадында Көнбайыш, бигерәк тә урыҫ классик әҙәбиәте ҡаҙаныштарын Көнсығыш классик әҙәбиәте традициялары менән ижади берләштереү юлында һәм журналистикала әүҙем эшмәкәрлеге менән дә күп эштәр башҡарҙы. Башҡорт әҙәбиәтенең тибы яғынан Көнсығышҡа ҡарауын билдәләп, “дини һәм философик ҡараштар, ыҙан һәм йолалар, ҡаһарманлыҡ эпостары һәм әкиәттәр, беҙҙең көндәргә килеп еткән ҡулъяҙма әҙәбиәтебеҙ үрнәктәре — бөтәһе Шәреҡ менән бәйләнешле. Дөйөм төрки тамырҙарыбыҙ ҙа, эстетик һәм һәүәҫлек башланғыстарына асҡыстар ҙа шунда”, тип яҙҙы ул был хаҡта үҙәк матбуғатта. Туғандаш төрки әҙәбиәттәренә ҡарата ул тағы: “Төрлө милләт әҙиптәре менән оҙаҡ йылдар хеҙмәттәшлек иткәс, мин шундай һығымта яһай алам. Артабанғы мәҙәни үҫеш өсөн беҙгә иң тәүҙә үҙебеҙҙең туғандаш төркиҙәрҙең мәҙәниәтенә, әҙәбиәтенә, тарихына иғтибарҙы арттырыу мөһим. Совет йылдарында бергә Союзда йәшәгәндә башҡа халыҡтар менән тупланған уртаҡ мәҙәни мираҫты милләттәштәребеҙгә еткереү ҙә ҙур эш булыр ине”, — тигәне бар. Иң мөһиме, был өлкәлә Әхиәр Хәким үҙе “Литературная газета”ла эшләгәндә мәҙәниәттәр, әҙәбиәттәр бағланышына күп хеҙмәттәр күрһәтте, үҙ ижады менән дә өлгө булып торҙо.

Уның журналист, редакторлыҡ эшмәкәрлеге — үҙе бер оло мәктәп, ижади-ойошторocc һабаҡтары. Мәскәү коллегаһы Людмила Лаврова Әхиәр Хәкимов-редактор хаҡында: “Уның шәхесе һәм эшмәкәрлеге күп милләтле ысынбарлығыбыҙҙы формалаштырған һоҡландырғыс мәҙәни синтез үрнәге булды”, — тип яҙҙы. Уның, әйтәйек, Ҡайсын Кулиев, Рәсүл Ғамзатов, Георгий Гулия, Нодар Думбадзе, Олесь Гончар, Василь Быков,

Иван Драч, Иван Чигринов, Сыңғыҙ Айытматов, Әҙел Яҡупов, Сәрүәр Әзимов, Мөьмин Ҡәнәғәт, Әбдежамил Нурпеисов кеүек төрлө милләттәрҙең атаҡлы яҙыусылары менән яҡын дуҫлығын һәм ижади хеҙмәттәшлеген айырып әйтә. “Литературная газета” редакцияһы тирәһенә Мәскәүҙең һәм элекке союздаш республикаларҙың күренекле тәнҡитселәрен һәм әҙәбиәтселәрен туплағанын, милли әҙәбиәттәр бүлегендә эштәрҙең ҡайнап тороуын һөйләй.

Мәскәүгә оҙайлыраҡ командировкаға барған саҡтарҙа йәки Переделкино ижад йортонда булғанда Цветной бульварға, “Литературная газета” редакцияһына Әхиәр Хәкимов янына ингеләй торғайным. Эштәренең һәүетемсә йә тығыҙыраҡ саҡтарына ла тура килгәнем бар. Республикаларҙан килгән яҙыусылар ингән саҡта йәиһә нәүбәттәге һанға гранкалар ағылғанда ошо ҙур бүлмә шаулап тора, берәү керә, икенсеһе сыға, йыш телефон шылтырай. Ундай мәлдәрҙә бик мәшәҡәтләмәүҙе хуп күрәһең, сәләм тапшырып, хәлен белешеп, булһа, йомошоңдо әйтеп, тиҙерәк сығыу яғын ҡарайһың. Әммә ҡайһы ваҡыттарҙа, бигерәк тә кисләтә иркенләп ултырырға, гәпләшергә яйҙар ҙа сығып ине. Бына шунда Өфө хәлдәре, ижад эштәре, яҙыусыларыбыҙ ни эшләй — барыһын да иркенләп һөйләшә торғайныҡ. Әхиәр Өфөнө, дуҫтарын һағыныуы, бында ижад эшенә ваҡытының ҡалмауы хаҡында бошоноборaҡ һөйләп тә ташлай торғайны. Иллә мәгәр ул барыбер шул шаулы мөхиткә, әҙәбиәт ҡаҙаны эсенә тамам күнгәйне. Шунһыҙ уға йәшәү һәм ижад стимулы ла булмаҫ кеүек ине. Ултырҙаш булғандарым булды, бигерәк тә республикаларҙың күренекле яҙыусылары алдында абруйы ҙур ине. Уны редакторлыҡ егәрлелеге өсөн генә түгел, ижады өсөн дә хөрмәт иттеләр. Быны мин Мәскәүҙән бигерәк республикаларҙа, мәҫәлән, Ташкент, Алма-Ата, Киев ҡалаларында булған конференцияларҙа йәки әҙәбиәт буйынса ҙур кәңәшмәләрҙә яҡшы тойҙом.

Ташкенттағы бер осрашыу яҡшы хәтеремдә. Мәскәүҙән, Бакуҙан, Алма-Атанан, Фрунзенан (хәҙер Бишкек), Дүшәмбенән, Нөкөстән миңә ҡорҙаш әҙәбиәтселәр, яҙыусылар саҡырылғайны унда. Шунда мин табындың үҙенсәлекле күркенә әүерелгән тәртип-низамына диҡҡәт иттем. Һәр кемгә берәр мәртәбә генә бирелер тоста, Кавказ халыҡтарындағы кеүек тапҡыр, ҡыҫҡа итеп түгел, бәлки ошо ҡорҙағы коллегаларың хаҡында үҙең белгән ҡәҙәр һүҙ әйтергә тәҡдим яһалды. Уның шунса тос, ыҡсым булыуы ла үҙенсә бер шарт ине. Бында дөйөм һүҙ, риторика менән генә һис ҡотолоп булмай һәм улай ярамай ҙа. Табындаштарымдан мәскәүлеләр Әхиәр Хәкимов, Роберт Бикмөхәмәтов, Владимир Суровцев, Виктор Оскоцкийҙың ижадтары менән танышлығым яҡшы булһа ла, үзбәк Азат Шәрәфетдинов, ҡаҙаҡ Ырымғали Нурғәлиев, ҡырғыҙ Кәли Садыҡов, ҡарағалпаҡ Камил Максетов, тажик Мансур Шукуров кеүек билдәле профессорҙар, әҙәбиәтселәр, уларҙың хеҙмәттәре тураһында бүтәндәр әйткәнде ҡабатламайынса, йә ҡабатланһа, өҫтәп ҡеүәтләп, фекерҙәремде әйтергә, үҙ баһамды бирергә тырыштым тосымда. Бында бер-берендең ижадын белеү, дәрәжәң, коллегалығың да һынала ине. Үҙемде ҡыуандырғаны ҡәләмдәштәремдең минең хеҙмәтемде, китаптарымды ишетә-белә алған ҡәҙәренсә хәбәрҙар икәне, иң мөһиме, яңыса, үҙҙәренсә баһа биреүҙәре ине.

Ил буйынса таралған дуҫ-иш, таныш ғалим һәм яҙыусыларҙың берберeһенең хеҙмәттәрен белеүе, профессиональ баһалауҙары — үҙе бер

ҙур мәртәбә. Ул замандағы СССР халыҡтары әҙәбиәтенән яҡшы хәбәрҙар, республикалағы иң күренекле яҙыусылар менән яҡын таныш һәм дуҫ булған Әхиәр Хәкимдән ҡала әҙиптәр, тәнҡитселәрҙе ул саҡлы ныҡ белгәндәр бармаҡ менән генә һанарлыҡ булғандыр тим. Әхиәр Хәким, өҫтәүенә, үзбәк, ҡаҙаҡ, украин телдәрен камил белә һәм яҙыусылар менән туған телдәрендә иркен аралаша ине. Былар инде уға хөрмәтте тағы бермә-бер арттырып ебәрер булғандыр. Шуға Әхиәр Хәким беҙҙең алда, күп кенә коллегалары ҡаршыһында бер башҡа юғары торҙо һәм хаҡлы ғорурланыр ҙа ине.

Шул уҡ ваҡытта Әхиәрҙең илдә дандары, ижадтары ҙур яҙыусылар менән дә, дәрәжәләренә ҡарап тормай, үҙен тиң күреп бәхәсләшеүҙәренә, тәҡдим иткән мәҡәләһенә йәки әҫәренән фрагментҡа үтә талапсан килеүенә шаһит булғаным бар. Бер заман, үткән быуаттың һиксәненсе йылдары аҙағында күп милләтле совет әҙәбиәтендә милли үҙенсәлектәр хаҡында барған дискуссияла ҡатнашырға һәм бер мәҡәлә яҙырға заказ бирҙеләр. Ниндәй теоретик мәсьәләләргә туҡталырға кәрәклеген дә әйттеләр. Күпмелер ултырып, был мәҡәләне яҙып ташланым һәм Мәскәүгә ебәрҙем. Тиҙ арала ”Литературная газета”нан мәҡәләмдең редакторланған, күберәк һорауҙар ҡуйып сыбарланған вариантын үҙемә тағы эшләргә, аныҡларға, тулыландырырға хат менән ебәрҙеләр. Өҫтәүенә, Әхиәр Хәкимов үҙе телефондан Өфөгә шылтыратып, уй-теләктәрен, талаптарын еткерҙе. Ныҡ ҡына ултырып, талаптарын мөмкин хәтле үтәп, тулыландырып, мәҡәләмдең икенсе вариантын һалдым. Бер аҙҙан ҙур гранка килеп төштө. Тағы тунағандар, аҙаҡ Әхиәр әйтеүе буйынса, үҙе лә ныҡ ҡына өҫтәштергән. Шулай итеп, 1988 йылдың 7 сентябрь һанында “Литературная газета”ла “Об общем в связи с особенным” тигән дискуссион мәҡәләм сыҡты. Шунда мин редакция эшенең ни тиклем мәшәҡәтле, ә Әхиәр Хәкимдең уға бар көсөн, һәләтен һалыуын яҡшыраҡ төшөндөм.

Уның күренекле яҙыусылар һәм тәнҡитселәр менән тиң һөйләшеүгә талапсан редактор һәм һәләтле әҙәбиәтсе икәнен дә күрһәтә ине. Минең белеүемсә, Әхиәр Хәким рухы, дуҫлығы аша үҙенә яҡын ҡәләмдәштәре менән хатлашырға, уй-фекерҙәре менән уртаҡлашырға әүәҫ ине. Мәҫәлән, минең үҙемдә уның егермеләп хаты һаҡланған. Уларҙың күпселеге ижад эше, әҙәбиәтебеҙ тураһында уйланыуҙар, фекер алышыуҙар менән һуғарылған. Яҙыусыларыбыҙҙың ижади сикләнгәнлеге, әҙәбиәтебеҙҙең кимәле шаҡтай түбән булыуы хаҡында бошоноуҙарын да белдерер, хәбәрләшер ине. Ул яҙған хаттарында ла әҙәбиәт хәстәре, ижад ҡомары менән йәшәне. Тыуған яғын, дуҫтарын һағынып булды.

Уға оло исем бирелгәс, яҡташтары Дәүләкәндә матур йорт һалып ҡуйғас, Әхиәр Хәким ғаиләһе менән бары ун йыл самаһы ғына, унда ла күберәк йәйгеһен, тыуған яғында, дуҫтары, туғандары янында йәшәп ҡалды. Йонсоған, ауырыу булһа ла, һуңғы көндәренә тиклем ҡәләмен буш тотманы, яңы повестарын, хикәйәләрен, шиғырҙарын яҙа торҙо. Ул һаман ҙур пландар менән йәшәй ине. “Башҡортостан” гәзитенә биргән бер интервьюһында “Автобиографик жанрға тотонорға ниәтегеҙ юҡмы? Һеҙҙең биография быға ныҡлы нигеҙ бирә лә баһа,” — тигән һорауға ул былай яуаплағайны: “Яҙһам да, мин үҙем тураһында түгел, ә йәшәйешемә, характерыма, ижадыма йоғонтоһо тейгән ҙур

кешеләр, дуҫтарым хаҡында яҙыр инем. Уйланған, ҡағыҙға төшкән парсаларым байтаҡ. Ғүмер булһа, тотонормон да әле. Был эш, моғайын, уҡыусыларға еткерәһе аҙаҡҡы һүҙем булмаҫмы…” Быға өҫтәп: “Сит илдәрҙең, Мәскәүҙең, элекке союздаш республикаларҙың, үҙебеҙҙең Башҡортостандың да күренекле яҙыусылары менән ижади фекерҙәш, сәфәрҙәш, юлдаш, байрамдарҙа табындаш булыу бәхете тейҙе миңә. Әҫәрҙәремде үҙ телдәренә тәржемә иткән йәки ижадым тураһында фекер әйткән әҙиптәр, тәнҡитселәр тураһында ла йылы хәтирәләр һаҡлайым.

Пландар, аҙағынаса уйланған романым тынғы бирмәй. Пландар бар ҙа ул, әммә ғүмер сикле — шуныһы үкенесле”, — тип яуап биргәйне.

Быларҙың күпселеге ғәмәлгә ашмай ҡалыуы бик үкенесле, әлбиттә, нишләйһең, ғүмер сикле шул. Шундай үкенестәрҙе әҙ генә баҫып булһа ла, 2003 йылда, вафат булыр алдынан, редакция хеҙмәткәре Закир Зиннәтуллиндың Әхиәр Хәкимдән “Йылдар, юлдар, исемдәр” тигән бик тос йөкмәткеле интервью яҙып алып, “Ватандаш” журналында (2004, №8) баҫтырып сығарыуы оло рәхмәткә лайыҡ. Ул интервью Әхиәр Хәкимдең алда әйткән пландарының бер киҫәген булһа ла әйтеп бирә, олуғ әҙибебеҙҙең рухи донъяһын, интеллект юғарылығын, эрудиция киңлеген, яҡын коллегалары, ҡәләмдәштәре даирәһен дә бәйән итә. Ул баҫма яңы быуын ғалимдарыбыҙға, яҙыусыларыбыҙға үҙенсә бер васыят та ул. Былар — Әхиәр Хәкимдең һуңғы һабаҡ һүҙҙәре лә.

Ҡәләмдәшебеҙ һәр йәһәттән һәләтле шәхес ине. Мәскәүҙә ул әҙәби ижад, журналистика хеҙмәте менән ҡатар фольклор, әҙәбиәт ғилеме менән дә шөғөлләнде, тәржемә эшен дауам итте. Беҙ әле уның был тармаҡтарҙағы эшмәкәрлегенә әллә ни иғтибар иткәнебеҙ ҙә юҡ. Ә улар махсус өйрәнеүгә һәм баһаға лайыҡ.

Әхиәр Хәким СССР Фәндәр академияһының Донъя әҙәбиәте институтында ла байтаҡ ҡына эшләп алды. Алда әйткәнебеҙсә, “Урал батыр” эпосының урыҫсаға академик тәржемәһен эшләне, унан һуң фин-уғыр халҡының атаҡлы “Калевала” эпосының фин, карел, эстон милли версияларын өйрәнеүгә һәм тәржемәләүгә тотондо. Халыҡтарҙың боронғо мифологияһы менән мауыҡты. “Калевала” эпосының айырым руналарын башҡортсаға ауҙарҙы. Ошо нигеҙҙә “Урал батыр” эпик ҡобайырының, фин-уғыр руналарының, германдарҙың “Өлкән Эдда”, “Нибелунгтар тураһында йыр” эпостарының иң боронғо тамырҙары беҙҙең Көньяҡ Уралға, Арҡайым дәүеренә килеп тоташыуын тоҫмалланы, был проблемаға мөкиббән китте. Өфөлә Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ул “Башҡорт әҙәбиәте тарихы”ның ике томлығын урыҫ теленә тәржемә итеүҙә һәм редакторлауҙа ҡатнашты. Мәскәүҙә йәшәгән көйө республикабыҙҙа әҙәбиәт, фольклор ғилемдәренең торошо менән ҡыҙыҡһынып, үҙ өлөшөн индереп торҙо. Мәскәүҙә М.Горький исемендәге Әҙәбиәт институтында бер төркөм башҡорт йәштәрен тәржемә тәжрибәһенә һәм серҙәренә өйрәтеүе менән дә ҙур эш башҡарҙы, был өлкәлә лә хеҙмәтен йәлләмәне.

Әҙәбиәт ғилемендә Әхиәр Хәким элекке СССР халыҡтары әҙәбиәттәре белгесе дәрәжәһенә күтәрелде. Ул илебеҙҙең, республикаларҙың күренекле яҙыусылары менән ижади бәйләнештә йәшәне, күптәре менән яҡын дуҫ, фекерҙәш булды. Урыҫ әҙәбиәте тураһында әйтеп тормаҫтан,

ул айырыуса барлыҡ элекке союздаш республикалар әҙәбиәтен бик яҡшы белә ине. “Ватандаш” журналына биргән һуңғы интервьюһында күп милләтле совет әҙәбиәтенә асылда шаҡтай тулы һәм төплө характеристика биреп сыға. Һәм аҙаҡта: “Төрлө милләт әҙиптәре менән оҙаҡ йылдар хеҙмәттәшлек иткәс, мин шундай һығымта яһай алам: артабанғы мәҙәни үҫеш өсөн беҙгә иң тәүҙә үҙебеҙҙең туғандаш төркиҙәрҙең мәҙәниәтенә, әҙәбиәтенә, тарихына иғтибарҙы арттырыу мөһим”, — ти ул. “Элекке совет әҙәбиәте — әле беҙ үҙләштереп, һеңдереп бөтмәгән оло бер донъя ул. Уны аңлап, аңлатып бөтөү өсөн генә лә әле күп көс, ваҡыт талап ителәсәк,” — тигән һүҙҙәре лә бик актуаль яңғырай.

Элекке совет әҙәбиәтен, хәҙерге Рәсәйҙең һәм яҡын туғандаш илдәр әҙәбиәтен яҡшы белеүе, уның талантлы яҙыусылары менән тығыҙ ижади бәйләнештә булыуы, ошо әҙәбиәттәр ҡаҙаныштары юғарылығына ориентир тотоп яҙышыуы һәм ҙур ижади бейеклектәргә өлгәшеүе менән Әхиәр Хәким үҙе бер феномен булып ҡала.

Ошо юғары үрҙән ҡарап, Әхиәр Хәким беҙҙең хәҙерге башҡорт әҙәбиәтенең кимәле шаҡтай түбән булыуына, яңы быуын яҙыусыларыбыҙҙың һүлпәнлегенә, тейешле ижади эҙләнеүҙәр тойолмауына бик бошона торғайны. Иҫкә алған интервьюла ла ул быны баҫым яһап әйтә: “Мине башҡорт әҙәби мөхитенең һүлпәнлеге борсой. Етди эҙләнеүҙәр бик аҙ. Форма, стиль, образлылыҡ өҫтөндә эшләүселәр бар, әммә уларҙа ла яңылыҡ юҡ. Яңылыҡ та түгелдер, бәлки — башҡа милли әҙәбиәттәр инде күптән үҙләштергән нәмәләрҙе яңылыҡ тип күрһәтеүе лә дөрөҫ булмаҫ ине.

Күҙгә күренерҙәй олпат, ҙур күләмле етди проза, эре поэтик әҫәрҙәр юҡ, ғөмүмән, бөтә әҙәбиәт ваҡланды, түбәнәйҙе.

Беҙҙә йәш шағирҙар, айырыуса шағирәләр күп, әммә уларға иғтибар етмәй. Әҫәрҙәрендә бер үк хис-тойғо, форма, ә фекер һай. Шиғри үлсәмдәрҙәге, ритмикалағы бер төрлөлөк тураһында инде әйтеп тораһы ла түгел…

Прозаиктарға ла эш етерлек. Әле беҙҙә урбанистик әҙәбиәт бөтөнләй юҡ. Тарихи проза өлкәһендә эшләрҙәй йәштәрҙе эҙләүгә лә иғтибар кәрәк — ул йүнәлеш һәр милли әҙәбиәттең бик мөһим өлөшө, ысын мәғәнәһендә йөҙө. Ғөмүмән, ижади йәштәргә иғтибар — милләттең киләсәген хәстәрләү ул”.

Былар халыҡ яҙыусыбыҙҙың шулай уҡ һабаҡ һүҙҙәре.

Йомғаҡлап әйткәндә, башҡорт прозаһына, айырыуса роман һәм повесть жанрҙарына Әхиәр Хәким тарих һәм заман тематикаһын социаль, мораль-этик, философик, психологик яҡтан сәнғәтсә асыуы, поэтиканы байыҡтырыуы, тел-стиль камиллығына өлгәшеүе менән әҙәбиәтебеҙҙең кимәлен юғары күтәреште, үҙ әҫәрҙәренең иң яҡшы үрнәктәрен тәржемәләр аша донъя киңлектәренә алып сыҡты.

Әхиәр Хәким бына тигән стилист булды. Ул туған телебеҙҙең нескәлектәрен, мәғәнә айыштырып, йырлап, көйләп торған һүҙҙәр ағышын, эске моңон, лексик төҫмөрҙәрен һиҙгер тойоп эш итте. Халыҡ яҙыусыһының быйндай ижады хәҙер бер оло әҙәби мәктәп булып тора; унан алыр ижади һабаҡтар сикһеҙ күп.

Йылдар үтә, заманалар үҙгәрә, әммә аҫыл әҫәрҙәр, ижади һабаҡтар йәшәй һәм мәҙәниәткә хеҙмәт итә килә.